*Таңсулпан ҒАРИПОВА*

# НОҒМАН УРМАНДАРЫ



Армыт-армыт тауҙар... Алыҫтан ҡарағанда төрлө юғарылыҡта улар: бар башына сәлләләй болот урағандары, тәкә мөгөҙөләй текә, ялтыр ҡайраҡташтарында ҡояштың тәүге нурҙарын сағылдырып, ҡалҡандай ҡалҡҡандары, түбәләрендә меңйәшәр ҡарағастарҙы шаулатып, ваҡыт һәм заман өҫтөнән аша ҡарап, олпат тыныслыҡ һәм мөһабәтлек һаҡлап ятҡандары бар...

Инҙәренә ни күтәрмәгән дә, ни күрмәгән, ни кисермәгән был тауҙар?! Талын ҡырҡһаң, ерем тип йән биргән батырҙар ҡаны тама, ҡурайына тын өрһәң, халыҡ зары ағыла. Бары ла бар Уралда: ҡайғыһы ла, шатлығы ла, мал ҡото ла, батырҙар ҡәре лә, һылыуҙар моңо ла. Үҙенең 50 йыллап ижады дәүерендә 42 китап авторы булған Ноғман Мусин ижадын, ғөмүмән, уның тормош-булмышын кем нисектер — мин ошо Урал армыттарына оҡшатам.

Ноғман Мусиндың ижады менән студент йылдарында ныҡлап таныша башланым. Курс эшем уның ижадын өйрәнеүгә арналғайны, ошо тәүге «ғилми эшем» диплом алды эшенә олғашты. Әммә Ноғман ағай ижады буйынса диплом эше яҙырға тура килмәне.

Ләкин Ноғман Мусин әҫәрҙәрен өйрәнеүҙән ҡалған тәм, ҡырағай бал ҡорто йыйған танһыҡ таттай, хәтерҙә ҡалды һәм ошо тойғо артабан уның сыҡҡан бер әҫәрен яҙлыҡтырмай уҡып барырға мәжбүр итте. Был ҡомар уның романдарын уҡыған һайын арта барҙы. Хикәйәнән повесҡа, повестарҙан романдарға күскән һайын, шәрбәттең бөтә нескәлеген үҙенә йыйыған Бөрйән балылай, Ноғман Мусин ижады ла бәҫләнә, тослана барҙы. Әҙиптең «Мәңгелек урман» дилогияһы, «Зәңгәртауҙа аҡ болан», «Яралы кеше тауышы», «Таң менән сыҡ юлдарға» трилогияһында ҡатмарлы һәм сетерекле тормошобоҙ бөтә яҡлап тәрән һәм киң сығылыш тапты.

Ноғман Мусин үҙенең ярты быуатлыҡ ижад дәүерендә Еребеҙҙең үпкәһен — Бөрйән урмандарын — һаҡлау тураһында ярһып саң ҡаҡты, ә улар һирәгәйгәндән һирәгәйҙе. Әммә маһир яҙыусы күкрәгенән сыҡҡан урман һаҡлау, эсәр һыуыбыҙҙы, һулар һауабыҙҙы бысратмау хаҡындағы ораны бөгөнгө быуынға ишетелмәһә лә, киләсәк быуынға ишетелмәй ҡалмаҫ: донъяла иң көслө ҡеүәт — ул фекер тиҙәр бит, әгәр ул ауазға әүерелһә?! Юҡҡамы ни йәшәйештең башында һүҙ — өн — ауаз торған... Ғәжәп түгел, бер саҡ ҡырҡылған төпһәләр урынында ҡабат урман шаулаһа һәм Еребеҙ үпкәһе шул урмандар «Ноғман урмандары» тип аталһа. Ғәжәп түгел.

Ижад кешеһенең яҙмышы — үҙе бер ижад. Ул һис көтмәгәндә әле бер, әле икенсе яғы менән асыла. Ноғман Мусин әҫәрҙәрен уҡымлы итеү серенә күптән төшөнгән. Үҙенә генә хас художество стиле, ваҡиғалар, характерҙар биреү, сюжет ҡороу маһирлығын булдырған. Бына уның «Шунда ята батыр һөйәге...» романы уҡыусы өсөн яҙыусы Ноғман Мусин биографияһының өр-яңы битен асты. Әлбиттә, башҡорт прозаһының тарихи романдарға ҡытлыҡ кисергәне юҡ. Әммә Ноғман Мусин маһирлығы, уның кеше күңелен ғәжәйеп нескәлек менән асып бирә алыу мөмкинлеге менән яҙылған роман... Әҫәр үҙәгендә — Алдарбай батыр. Алдар батырҙың үҫеү юлын яҙыусы ваҡиғалар сылбырына тапшырмай, ә йәш егеттең ир ҡорона етеүен, яугир, полководец, сәйәсмән,

дипломат булып етешеүен тәрән психологизм ағымында, үҫештә бирә. Һәм, ғөмүмән, һәр әҫәрҙең уңышы нигеҙендә психологик дөрөҫлөк ята булыр, әНоғман Мусин — ысын мәғәнәһендә «кеше күңеленең инженеры».

Бынан утыҙ йылдар элек, ауылда клуб мөдире һәм китапханасы булып эшләгән саҡта әле, ауыл халҡының, көтөүсе-малсыларҙың Ноғман ағай китаптарына сират баҫыуын күҙәтергә тура килде. Иң алыҫ йәйләүгә киткән чабандар моҡсайына ҡатындары икмәк, ә үҙҙәре Ноғман Мусин китаптарын һалды.



*Ғаиләһе. Ҡатыны Фәһимә, ҡыҙҙары Фәрзәнә менән Гөлшат*

Илле йылда 42 китап сығарыуға, унлаған роман яҙыуға өлгәшкән яҙыусы өсөн (ә хикәйәләр йыйынтығын әле лә сығармаған) ваҡыт төшөнсәһенең нимә аңлатҡанын уйлап ҡына төшөнөп булалыр. Әммә ул бит яҙыусылыҡ эшенән тыш тиҫтә-тиҫтә йылдар арауығында мәктәптә лә уҡыта, «Башҡортостан» гәзитендә, «Ағиҙел» журналында эшләү, Башҡортостан яҙыусылар союзында әҙәби консультант, китап нәшриәтендә, телевидениела... Өҫтәүенә күпме йылдар рәттән ул Яҙыусылар союзының проза секцияһын етәкләне. Үҙ әҫәрҙәрен яҙыу өҫтөнә, күпме ҡәләмдәштәренең ҡулъяҙмаларына уның күҙ нурҙары, йөрәк йылыһы түгелгән...

Ошо юлдарҙы яҙғанда, үҙемдең тормоштан Ноғман Мусин шәхесенә бәйләнгән иҫтәлек хәтергә төштө. Ҡулға ҡәләмде ныҡлап алдым тигәндә генә ҡаты сирләп киттем. Яҙыусы булайым, тигән уй юҡ юҡлыҡҡа, мәгәр киләсәктә таңдай һыҙылып килгән хыял да юҡ түгел. Тумбочка өҫтөндәге биш-алты хикәйәм менән операция көтөп ятам. Нимәлер етмәгәндәй булғас, иртәгә операцияға инәм тигән көндө «Айлы төн»дө лә әтмәләп һалдым. Йәнәһе, иш янына ҡуш булһын. Эргәмә һабаҡташым килде. «Гәүһәр, — тим, — ошоларҙы Союзға илтеп бир. Минең менән бер-бер хәл була ҡалһа быларҙы ташларҙар, юғалыр». Хикәйәләр китте. Өҫтән тауҙай йөк төштө.

Бик күп хитланғандан һуң операцияһы ла үтте, өйгә лә ҡайттым. Ныҡлап аяҡҡа баҫып булмаһа ла, өйҙә йөрөй башланым. Бер саҡ ишек шаҡынылар. Почтальон икән. Почтаға барып, бандероль алырға кәрәк. Аптыраным. Ә инде бандеролде асҡас, һоро ҡағыҙға уралған, йәшел тышлыҡҡа ҡыҙыл буяу менән яҙылған «Таңсулпан Ғарипова «Ялан сейәһе» тигән һүҙҙәрҙе уҡып саҡ һуштан яҙманым. Китаптар араһында әлегә тиклем әҫәрҙәрен генә уҡып белгән, әҫәрҙәренең тәме студент саҡта күңелемдә тороп ҡалған Ноғман ағайҙан хат та бар ине. Баҡһаң, ошо китаптың редакторы Ноғман ағай икән... Рухыма ҡанат ҡуйырҙай ошо мәлгә күп тә үтмәне, «Ағиҙел» журналында уның «Таңсулпан ҡәрҙәшкә асыҡ хат»ы килеп сыҡты. Бына шулай. Яҙмыш беҙҙе икенсегә осраштырҙы. Тәүгеһендә — уның әҫәрҙәре менән, быныһында — уның ҡулы менән редакторланған тәүге китабым аша.

Бынан һуңғы йылдарҙа Ноғман Мусин менән съезд, конференция мәлдәрендә осраша-һөйләшә йөрөнөк. Минең илле йәшлек юбилейым уңайы менән тыуған ауылым Күсейҙә лә булды оло әҙип. Ошо саҡлы ҙур яҙыусының байрамымды күтәрешергә юлға сығыуын ишетеп, ҡайһы берәүҙәр: «Таңсулпандың бүреһе олоған икән!» — тигәндәрҙер ине. Уныһы ла раҫ: олоно. Ноғман ағай үҙенең сабыр холҡо, тыйнаҡ йылмайыуы, тос фекерле һүҙҙәре менән ауылдаштарым күңелен әсир итеп китте.

Ноғман Мусиндың шәхесе, яҙыусылыҡ эшмәкәрлеге тураһында йыш ҡына уйланырға тура килә. Уның бөткөһөҙ шишмәләй урғылған талантына кешелек сифаты — изгелеклеге, киң күңеллелеге сәбәп түгел микән?

Ноғман Мусиндың көткән донъяһы ла әҫәрҙәре кеүек — ҡойоп ҡуйғандай. Үҙ ҡулы менән, бураһына тиклем үҙе бурап һалған йорттар, башҡа ҡаралтылар. Хужа-

һының ижадына оҡшап, өлгөргән, суҡ-суҡ, тәлгәш-тәлгәш һалынған емеш-еләк. Бөтә нәмәлә тәртип, бөхтәлек, муллыҡ, тәбиғилек, матурлыҡ. Ошо эскерһеҙ тәбиғилек, матурлыҡ Ноғман ағай менән Фәһимә апай араһында ла, ҡыҙҙарының олоғайған ата-әсәләренә ҡарата мөнәсәбәтендә лә йылы нурҙай тирә-йүнгә һирпелеп тора. Ошо нурҙы «Аҡлан» һауаһына ҡушып эсәһе лә эсәһе килә. Ноғман ағай емеш йыя, алланып-балланып бешкән сейәләрҙе берәмләп, һаҡлыҡ менән күнәгенә төшөрә, Фәһимә апай «Аҡлан»-да йәшәгән, ижад иткән яҙыусылар хаҡындағы иҫтәлектәре менән уртаҡлаша, Фәрзәнә менән Гөлшат варенье ҡайнаталар, үҙ-ара сөкөрләшә-сөкөрләшә бөтмәҫ-төкәнмәҫ өй эштәре менән булалар.

Ноғман ағай менән «Аҡлан»да ике көн буйы аралашып-һөйләшеп йөрөгәндә һүҙҙең осо йыш ҡына уның әсәһенә барып ялғанды. Күрәһең, донъя көтөү маһирлығын да, изгелеклек, тыйнаҡлыҡ, кәрәк саҡта дөрөҫлөктө ярып-бәреп әйтә алыу сифаттарын да атанан иртә ҡалып әсә тәрбиәһендә үҫкән Ноғман ағай унан алған. Ноғман Мусиндың «Ҡунаҡсыл йорт» тип аталған, эстәлеге менән әсә тураһындағы дастандарға тиң яҙмалары ла ошо хаҡта һөйләй.

Ижад кешеһенең булмышын төшөнөү өсөн уның тыуған-үҫкән ерен күрергә кәрәк, тиҙәр. Хоҙай буласаҡ әҙиптең ата-бабаларын юҡҡа ғына үҙенең эске ҡөҙрәте — ҡара алтыны — менән республика тормошона йән-ҡот биреп ятҡан Ишембай тупрағына юлыҡтырмағандыр. Ҡотло ерҙең ризығы менән туҡланып, уның йәм -ҡөҙрәтеп татып үҫкәнгә лә халҡы өсөн оло бер хазиналыр Ноғман Мусин. Уның әҫәрҙәренең тел байлығы — хәҙерге башҡорт әҙәбиәтенең иң оло ҡаҙанышы, нисәмә быуын ижадсыларҙың өлгәшергә хыял иткән аҡ елкәне.

Ноғман Мусиндың «Шунда ята батыр һөйәге» романында Алдарҙы бөрйән ырыуының батыры итеп күтәреү күренеше бар. Алдар быға бөтә тереклек донъяһына шом һалған аҡбарыҫты үлтереп өлгәшә. Әгәр батырҙы аҡ кейеҙгә һалып күтәреү ғәҙәте бөгөн дә йәшәһә, халыҡ, әлбиттә, батырҙары менән бер рәттән Ноғман Мусинды ла һайлар ине. Республикабыҙҙың иң юғары Салауат Юлаев исемендәге премияһына лайыҡ Ноғман Мусин «Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы» исемен йөрөтөүгә лә күптән хаҡлы.